Читайте нас на сайте http://kugarchi.bryanschool.ru/

Муниципальное общеобразовательное бюджетное учреждение средняя общеобразовательная школа им. Набиуллы Каримова с. Кугарчи

# ВЕСТИ в каждый дом

№ 19

21 декабря, 2020 года

## «Әсәм теле миңә сәсән теле...»




**Башҡорт телем** – туған бишегем!
Башҡорт телем- туған бишегем!
Әсәйемдең назлы ҡулдарында
Иркәләнеп , ireп яткандай,
Һин асаһың бәхет ишеген.
Һин- туктаЛмаҫ йөрәк тибешем!

Башҡорт телем – шишмә ағышы!
Ағиҙелдәй оҙон тарихыңа
Ғорурланмай буламы ни һуң?!
Һин халҡымдың сағыу балҡышы,
Һин ҡиммәтле йөрәк табышы!

Туған телем – һүнмәҫ йондоҙом!
Сит яҡтарға юлым тотһа әгәр,
Күңел юлым һиндә һаҡланыр.
Башҡортлоғом һиндә тойҙом,
Рухлы башҡорт ҡыҙымын!

Наҙгөл Мостафа ҡыҙы Кинйәбулатова, 9 синыф уҡыусыһы

Башҡорт теле- ата-бабаларыбыҙҙың иң ғәзиз бүләге, халҡыбыҙҙың тәрән аҡылын, фәһемле тарихын, йолаларын бергә туплап, беҙҙең көндәргә тиклем алып килгән. Телдә бөтә халыҡ сағыла. Башҡорт теле-халҡыбыҙҙың мәңге тере тарихы.Үҙ туған теле барҙың-үҙ туған рухы бар. Теле барҙың- иле бар, иле барҙың- даны бар, тигән сәсәндәр.

14 декабрь – башҡорт халҡының билдәле мәғрифәтсеһе М.Аҡмулланың тыуған көнө. Был көндө Бөтә донъя башҡорттары Ҡоролтайы башҡарма комитеты Башҡорт теле көнө тип иғлан итте. Беҙҙең Нәбиулла Кәримов исемендәге мәктәптә лә башҡорт теленә арналған саралар “Мәңге йәшә, башҡорт теле!” тигән девиз аҫтында «Халҡым теле миңә-хаҡлыҡ теле» исемле шиғырҙар конкурсы менән башланып китте. Был конкурста 6-7 класс уҡыусылары әүҙем ҡатнашты.Бикбулатова Илзидә, Исмәғилева Лиана, Садыкова Азалия һәм Юлия ,Бикбулатова Миләш, Мөксинова Гөлнур үҙҙәренең матур видео яҙмалары менән айырылып торҙолар.Иң тасуири шиғыр һөйләүсе тип Бикбулатова Миләш танылды. 5-9 класс уҡыусылары өсөн “Тел бәйгеһе” уйын-ярышы үтте.Был

ярыштарҙа Камил Сәлихов (5 класс), Рәсүл Хәкимов (7 класс), Миләш Бикбулатова (7класс), Наҙгөл Кинйәбулатова (9класс) алдынғылыҡты бирмәне.10-11 класс уҡыусылары “Шәйехзада Бабич- башҡорт поэзиһының һүнмәҫ йондоҙо” исемле дәрес-конференцияны ҡыҙыҡлы һәм фәһемле итеп уҙғарҙылар, Б.Йософовтың “Бабич» фильмын ҡаранылар.Башҡорт теленә арналған саралар 5-6 класс уҡыусылары менән һүрәт төшөрөү менән дауам итте.Иң матур,иң сағыу,иң үҙенсәлекле һүрәтте 7 класс уҡыусыһы Бикбулатова Илзидә тәҡдим итте.Шулай уҡ Кинйәбулатова Илзидәнең,Салихов Камилдың, Түләбаев Илнарҙың,Ҡолоев Фәнзилдең,Исмәғилева Лиананың һүрәттәре маҡтауға лайыҡ булды. 5-11 кластар өсөн Башҡорт теле көнөнә арналған Мифтахетдин Аҡмулланың тормошо һәм ижады буйынса Берҙәм дәрес үтте. Унда уҡыусылар күренекле шағирҙарыбыҙҙың туған телебеҙгә арнап яҙған шиғырҙарын һөйләнеләр, тел тураһында йырҙар яңғыраны. Сараға шағирҙың музейына виртуаль экскурсия йәм өҫтәне. Шағир-мәғрифәтсе М.Аҡмулланың тормош һәм ижад юлы менән таныштылар.Шулай уҡ беҙҙең Нәбиулла Кәримов исемендәге мәктәп «Аҡмулла буйынса онлайн диктант» акцияһында ла уңышлы ҡатнашты.Башҡорт теленә арналған сараларҙы “Әсәм теле миңә-сәсән теле» исемле иншалар конкурсы тамамланы.Конкурста уҡыусылар ҙур теләк менән ҡатнаштылар.Иң матур йөкмәткеле тип Садыкова Азалияның,Бикбулатова Милэштең, Исмәғилев Ильдандың иншалары табылды.Шулай уҡ Садыкова Юлия,Мөксинова Гөлнурҙың эштәре лә ҙур маҡтауға лайыҡ булыуын билдәләп үтер кәрәк.Бөтә был сараларҙы мәктәптең башҡорт теле һәм әҙәбиәте уҡытыусыһы Кинйәбулатова Гөлназ Зиннур ҡыҙы ойошторҙо.

Ата-бабаларыбыҙҙың изге аманаты - башҡорт телен киләһе быуынға еткереү һәр кемдең изге бурысы икәнлеген онотмаһаҡ ине.









**Башҡорт теленә арналған сараларҙа башланғыс класс уҡыусылары ла әүҙем ҡатнашты:йәш йөрәктәргә ҡаҡшамаҫ рух һәм дәрт өҫтәүсе шиғри сылбыр мауыҡтырғыс бай эстәлекле асыҡ дәрестәр һәм дәрестән тыш саралар һүрәттәр һәм иншалар конкурсы.Ошо сараларҙы башланғыс класс уҡытыусылары Сания Маруан ҡыҙы Хөсәйенова һәм Минзида Факил ҡыҙы Абдрахманова оҫта һәм мауыҡтырғыс итеп үткәрҙеләр.**

Теле барҙың - иле бар

Башҡорт теле – ул мин тыуғандан ишетеп үҫкән тел. Әсәйемдең бишек йыры ла башҡорт телендә. Һәр халыҡтың үҙ теле. Теле барҙың – иле бар, тип юҡҡа әйтелмәгән.

Башҡорт теле бик бай тел. Бер телдән дә ул кәм түгел! Беҙ үҙебеҙҙең телдә һөйләшергә, аралашырға тейешбеҙ. Тел яҙмышы –ил яҙмышы. Телебеҙҙе һаҡларға тейешбеҙ, сөнки, теле барҙың - иле бар, тип юҡҡа әйтмәгәндәр ата- бабаларыбыҙ.

Ғүмәров Динар, 4-се синыф уҡыусыһы.

Туған телем

Башҡорт теле - бик матур тел. Беҙ өйҙә башҡорт телендә бик матур итеп һөйләшәбеҙ. Мәктәптә лә беҙгә уның серҙәрен өйрәтәләр. Башҡорт теле ябай һәм еңел тел. Ул беҙҙең илдә дәүләт теле булып һанала. Миңә үҙемдең туған телем бик оҡшай.

Хәкимов Рушан, 2-се синыф уҡыусыһы.

Башҡорт теле.

Башҡорт теле - атам теле, әсәм теле, минең телем. Мин башҡорт телендә һөйләшәм, уйлайым, хисләнәм, аралашам, илһамланам һәм дә киләсәк тормошома маҡсат ҡуям.

Башҡорт телем минең бай, йомшаҡ, нескә, яғымлы, көслө, мәрхәмәтле һәм дә хөрмәтле!

Сабый саҡтан башҡорт телендә әкиәттәр, шиғырҙар, йырҙар тыңлап үҫтем. Иң беренсе хәрефтәрҙе лә үҙ туған телемдә әйтеп, әлифбаны уҡырға өйрәндем. Белем серҙәренә лә башҡорт телендә төшөнәм. Башҡорт телендә тапшырыуҙар, төрлө программалар, кинолар ҡарайым. Бик матур “Сулпылар”, ”Тамыр”тапшырыуҙарын хатта ҡустым да ҡарарға ярата. Бәләкәйерәк саҡта “Аҡбуҙат” журналын уҡыһам, хәҙер “Аманат” журналын, “Йәншишмә” гәзитен яратып уҡыйым.

Мин башҡорт телендә һөйләштем, һөйләшәм һәм Һөйләшәсәкмен!

Мин яратам туған телем – башҡорт телемде! Шуның өсөн, уның бөтөүенә юл ҡуймаясаҡмын!

Аҙнабаев Рамаҙан, 4-се синыф уҡыусыһы.


| | | | |
|---|---|---|---|
| **Редактор: Г.З.Кинзябулатова**<br><br>Технический редактор:<br>Г.З.Кинзябулатова | Издатель: МОБУ СОШ им. Н. Каримова с. Кугарчи<br>Адрес: 453383, Республика Башкортостан, Зианчуринский район, с. Кугарчи ул. Центральная 47а | **Газета выходит два раза в месяц**<br><br>Читайте нас на сайте<br>http://kugarchi.bryanschool.ru/ | Подписано в печать:<br>в 17:00 09.09.2019 года.<br>Объем издания 1 печ. л.<br>**Тираж 100 экз.** |